◆ Йолалар

# Ил туплаған милләт — илдә зиннәт,
## Һыйындырҙы халҡым күптәрҙе


Кунаҡтарҙы ҡаршылап

***Архангел ерендә йәшәүсе латыштар өсөн генә түгел, шулай уҡ райондың күп милләтле халҡы өсөн дә 23 июнь уртаҡ мәғәни сараға әйләнеүе менән әһәмиәтле.***

Тап ошо көндә "Лиго" байрамы билдәләнә. Быйыл да ул юғары кимәлдә һәм ойошҡанлы үтеүе, күңелле осрашыуҙар, бай тәьҫораттар менән иҫтә ҡалды.

Максим Горький ауылы янындағы быуа буйы шау-гөр килеп һабантуй яланын хәтерләтте. Бер яҡ ситтән сауҙа нөктәләре теҙелгән. Район ҡулланыусылар йәмғиәтенең (Фәриҙә Сәхибзадаева) тауарҙары, һыу, ҡәһүә, сәй һәм ҡамыр аштары, "Ғаилә" кафеһының (Роза Сөләймәнова) татлы ризыҡтары күптәр кинәнеп тәмләне. Стәрлетамаҡтан балалар уйынсыҡтары менән һатыу итергә шәхси эшҡыуар Роза Хәкимова йыл һайын килә икән. Кырмыҫҡалынан Нурсилә Әхмәтова ғаиләһе менән шешлек һәм башҡа тәм-том тәҡдим итте. Балаларҙы, кескәйҙәрҙе бигерәк тә ҡараңғыла балҡып торыусы яҡтыртҡыс шарҙар йәлеп итте. Борхоп ҡайнап ултырған самауырҙар, аш-һыу, мәғәни аралашыу ғаиләләргә матур ял һәм яҡшы кәйеф бүләк итте.

Ялан уртаһында сәскәләр, япраҡтар менән биҙәлгән ҡапҡа янында урындағы ауыл хакимиәте башлығы, "Максим Горький" тарихи-мәҙәни үҙәге һәм район мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, "Атбалсс" фольклор ансамбле, мәктәп уҡыусылары, башҡорт, рус, латыш халыҡтарының кейемдәрендәге гүзәл заттар милли ризыҡтар һәм яҡты йөҙ менән ҡунаҡтарҙы ҡаршыланы. "Лиго" байрамына район хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Илшат Әминев, Башҡортостан Халыҡтар дуҫлығы йорто директоры урынбаҫары Илшат Сабитов, Башҡортостан Латыштарының йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Виктор Карклин, Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры режиссеры Рөстәм Хәкимов килде.

Илшат Нәжметдин улы байрамға йыйылыусыларҙы башҡорт, рус, латыш телдәрендә сәләмләне һәм ҡыҫҡаса телмәр тотто.

— Беҙҙең республика татыулыҡта һәм дуҫлыҡта йәшәүсе күп милләтле халыҡтарҙың берҙәмлеге менән айырылып тора. Районыбыҙҙа ла улар бер-береһенә ярҙамлашып, шатлыҡ-ҡайғыларҙы уртаҡлашып бер ғаилә кеүек йәшәй. "Лиго" байрамының матур традицияға инеүе шуны раҫлай. Ул ижади хеҙмәттәшлекте нығытыуы, артабан үҫтереүгә этәргес биреүе менән дә әһәмиәтле. Быуаттан ашыу районыбыҙҙа йәшәүсе латыштар өсөн был яҡ тыуған ергә әүерелде. Улар аҙ һанлы булыуға ҡарамаҫтан, үҙҙәренең йола, ғөрөф-ғәҙәттәрен ҡәҙерләп һаҡлай, райондың иҡтисади, мәҙәни, социаль, рухи үҫешенә тос өлөш индерә. "Лиго" республиканың башҡа бер ерендә лә уҙғарылмай. Был йолаға ҡыҙыҡһыныу артҡандан-арта. Ижади аралашыу, осрашып күрешеүҙәр һәм иҫтәлекле ваҡиға унайынан яңы йыр-бейеүҙәр бөгөн барығыҙға ла дәрт-дарман бирһен, - тине.

Алып барыусылар "Янов төнө" тураһында бәйән итте. Йола уныш килтереүсе Алланы ҡеүәтләүгә ҡоролған. Тик ошо көн латыштар дарыу үләндәре йыйған, ҡояш байығас, яланға сыҡҡан. Гөл-сәскәләрҙән таждар үргән. Усаҡ яғып, бейеп-йырлап күнел асҡан, уның аша һикергәндә, аҙмыштарын юраған. Бигерәк тә урманда кем абаға сәскәһе таба, шул кешенең бәхете асыла тигән ырымға ышаныуҙар боронғонан ҡалған. Халыҡ сыр әҙерләгән, һыра ҡайнатҡан, йорт тирәһен япраҡтар һәм сәскәләр менән биҙәгән.

Ямғыр һибәләп үтеүе йылдың унышлы буласағына ишаралауы ла кәйефтәргә йоғонтоһоҙ ҡалманы.

(Аҙағы 6-сы биттә).

◆ Һаулыҡ һағында

# Шәкәр ауырыуы тураһында нимә белергә кәрәк?

***Үҙәк район дауаханаһында шәкәр диабеты, уны профилактикалау һәм дауалауға арналған семинар ошо сир ҡуйылған балалар, хеҙмәт һәм Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, уларға тиң граждандар өсөн үткәрелде.***

Был сара "Башҡортостан Республикаһы Әсәйҙәре" автономлы коммерция булмаған ойошма (башҡарыусы директоры Э. Ғәлимова) башланғысы менән ойошторолдо. Шулай уҡ БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Булат Әсәҙуллин, "СогазМед", "Диаконт" компаниялары ла булышлыҡ итте.

Медицина фәндәре кандидаты, табип-эндокринолог Лиана Шәйхуллина шәкәр диабеты типтары, сир үҫенсәлектәре, инсулин терапияһы һәм диета тураһында һөйләне. Һуңынан эндокринология профиленә ҡараған пациенттарға глюкометрҙар бирелде.

Осрашыу аҙағында барыһы ла йөкмәткеле лекция өсөн табип-белгескә рәхмәтен белдерҙе һәм үҙҙәрен борсоған һорауҙарға яуап алды.

**М.Зиннурова.**

## Вниманию зарегистрированных кандидатов на выборах Главы Республики Башкортостан 8 сентября 2019 года!

В соответствии с Кодексом Республики Башкортостан «О выборах» редакция газеты «Инзер» уведомляет о предоставлении печатной площади для размещения материалов предвыборной агитации в период с 9 августа 2019 года по 6 сентября 2019 года.

Общий объем предоставляемой бесплатной печатной площади составляет 20 % от общей еженедельной печатной площади, или 2032,8 кв. см.

Общий объем еженедельной печатной площади, предоставляемой за плату, составляет 20% от еженедельной печатной площади, или 2032,8 кв. см.

Стоимость платной печатной площади составляет 70 рублей за 1 кв. см. в т. ч. НДС 20%. Оплата производится со специального счета из средств избирательного фонда. Публикация материалов осуществляется на основании предварительной 100% -ой оплаты не позднее, чем за два дня до выхода материала в газете. Материалы должны быть предоставлены не позднее 5-ти дней до выхода в газете.

Адрес редакции: 453030, Республика Башкортостан, с.Архангельское, ул.Советская, д.18, e-mail: inzer_arh@mail.ru

Телефоны для справок: 8 (34774) 2-14-57, 2-18-44.

# Башҡортостан Республикаһы Башлығын һайлауҙарҙа муниципаль-ара фильтр

***Күрһәтелгәндән һуң, кандидаттарға үҙҙәренең кандидатураһына ярҙамға муниципаль берәмектәрҙең вәкәләт органдары депутаттарынан 454 ҡултамға йыйыу мөһим.***

Был БР Башлығын һайлауҙарҙы билдәләү тураһында ҡарар ҡабул иткән көнгә ошо муниципаль берәмектәрҙең уставтарында ҡаралған депутаттарҙың дөйөм һанының 5 процентын тәшкил итә. Ҡултамғалар иҫәбендә кәмендә 48 муниципаль берәмектәр һәм ҡала округтары вәкәләт органдарынан 56 депутаттың ҡултамғаһы булырға тейеш.

Кандидатты хуплау муниципаль берәмектең вәкәләт органы депутаты тарафынан кандидатты хуплауҙы белдергән ҡағыҙ битенә үҙ ҡултамғаһын (уны ҡуйыу ваҡытын һәм датаһын күрһәтеп) ҡуйыу юлы менән башҡарыла. Ҡултамғаның ысын булыуы нотариаль раҫланырға тейеш.

Муниципаль берәмектең вәкәләт органы депутаты,ниндәй ҙә булһа партия тәҡдим иткән бер генә кандидатты хуплай ала. Әгәр ҡултамғаларҙы тикшергәндә депутаттың берәүҙән күберәк кандидатты хуплауы асыҡланһа, ваҡыты буйынса иң алдан ҡуйылған ҡултамға ғына иҫәпләнәсәк. Ҡултамғалар кире ҡайтарыл-май.

Процесс барышында вәкәләт органдары депутаттарын ҡултамғаларын ҡуйырға көсләп ҡушыу, бының өсөн ниндәй булһа ла бүләк биреү тыйыла.

Хуплау ҡағыҙҙарындағы ҡултамғаларҙың дөрөҫлөккә тап килеү-килмәүен Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһы ағзаларынан торған Эшсе төркөм (БР Башлығы вазифаһына кандидаттар тарафынан тапшырылған документтарҙы ҡабул итеү, тикшереү буйынса) тикшерә.

Ҡултамғалы ҡағыҙҙар кандидатты теркәү өсөн мөһим булған башҡа документтар менән бергә 2019 йылдың 1 июленән 11-енә тиклем (урындағы ваҡыт менән киске сәғәт 18.00-гә ҡәҙәр) БР Үҙәк һайлау комиссияһына тапшырыла. БР Үҙәк һайлау комиссияһы 10 көн дауамында, йәғни 20 июлгә тиклем был документтарҙы, шул иҫәптән ҡултамғаларҙы тикшереп сыға.

Кандидатты хуплаусы ҡултамғалар исемлеген тапшырғандан һуң өс көн эсендә (13 июлгәсә) Үҙәк һайлау комиссияһы был кешеләрҙең исемлеген сайтта йәки төбәк дәүләт даими баҫмаларында яҡтыртасаҡ.

**Үҙәк һайлау комиссияһы.**

# Өфөлә яғыулыҡҡа хаҡ артты

***Өфөлә «Башнефть» компанияһының яғыулыҡ ҡойоу станцияларында бензин һәм дизель яғыулығы йәнә ҡиммәтләнде.***

Әйтәйек, АИ-92 маркалы бензиндың бер литры 25 тингә артты һәм бөгөндән 41 һум 40 тин тора. Atum-92 15 тингә ҡиммәтләнде — бер литры 42 һум. Atum-95 маркалы бензиндың хаҡы 25 тингә күтәрелеп, 44 һум 45 тингә етте.

Дизель яғыулығының хаҡы 15 тингә артты. Хәҙер автомобиль хужаларына дизель яғыулығының бер литры 45 һум 10 тингә төшә.

**"Башинформ".**